БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
ӨФӨ ҠАЛАҺЫ ҠАЛА ОКРУГЫ ХАКИМИӘТЕ
МӘҒАРИФ ИДАРАЛЫҒЫ

БОРОН-БОРОН ЗАМАНДА...

«Һаумы, һаумы, әкиәт!»
донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсы

ӨФӨ - 2022

БОРОН-БОРОН ЗАМАНДА…: «Һаумы, һаумы, әкиәт!» донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсы. - Өфө: Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы, 2022 - 66 б.

Редакцион коллегия:
Батыршин А.Р., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы начальнигы;
Арыҫланов В.З., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы начальнигы урынбаҫары;
Хурсан Т.Г., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы директоры;
Армиевская О.В., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы тел сәйәсәте буйынса бүлек начальнигы;
Рәхмәтуллина С.Х., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһының бүлек мөдире;
Шәрәфетдинова З.Т., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти -методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы;
Илембәтова Т.Ш., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы.

Был йыйынтыҡ кескәй балаларға, ата-әсәләргә, тәрбиәселәргә һәм уҡытыусыларға тәҡдим ителә.

Әхмәтова Самина,

Өфө калаһы кала округы
«48-се башҡорт лицейы»
муниципаль бюджет дөйөм белем
биреү учреждениеһы
уҡыусыһы

Етәксеһе: Әхмәҙинурова Айһылыу
Әмир ҡыҙы

Дуҫлыҡ күпере

Бик борон булған, ти, был хәл. Ләйсән ямғыры йылы тамсыларын ергә һибеп киткәндән һуң, йәйғор үҙенең күперен һуҙырға тотонған, ти. Күктә ҡояш шат йылмайып нурҙарын тирә-яҡҡа сәсә, ҡоштар һауала рәхәтләнеп оса, шишмә сылтырап ағып ята икән. Бөтә ерҙә тыныслыҡ, һиллек, ти.

Әммә бер мәл, ошо тынлыҡты боҙоп, тауыш сыға. Баҡтиһәң, күктәге йәйғор төҫтәре үҙ-ара һүҙгә килгән, ти.

– Һеҙҙең арағыҙҙа иң матуры мин. Ана, сәскәләр нәк минең төҫтө һайлап, ҡайһылай күркәм булып ултыралар!– ти икән Ҡыҙыл.

– Нисек инде? Мин һинән күпкә сағыуыраҡ, төҫөм һутлыраҡ,– тип ҡаршы төшкән Ҡыҙғылт һары.

– Юҡты һөйләмә! Иң сағыуы мин, ышанмаһағыҙ, ана, ҡояшҡа ҡарағыҙ. Ә ул булмаһа донъя ҡап-ҡараңғы булыр ине… – тип нығышҡан Һары.

– Ә мин булмаһам, тирә-яҡ йәнһеҙ булыр ине. Ҡоштарға, хайуандарға ашарға ризыҡ табылмаҫ, кешеләр иген күрмәҫ ине… – тип килешмәгән Йәшел.

– Юҡ, мин кәрәгерәк. Һауаһыҙ йәшәп була тиме ни? Бына минһеҙ, исмаһам, донъя бөтөр ине, – тигән Аҡһыл зәңгәр.
– Ә һыуһыҙ бөтә тирә-яҡ ҡорор ине, бер тереклек ҡалмаç ине, – тип бәхәскә ингән Зәңгәр.

Был һөйләшеүҙә тик Шәмәхәнең генә тауышы ишетелмәгән. Ул үҙ-ара бәхәсләшкән ағай-апайҙарын тыңлап шым ғына ултырған-ултырған да, былай тип һүҙ башлаған:
– Туғандарым, һүҙ көрәштереү килешмәгән эш. Эйе, беҙ һәр ҡайһыбыҙ үҙенсә матур, һәр ҡайһыбыҙ мөһим. Тирә - яғыбыҙға ҡарағыҙ әле. Һәр беребеҙ үҙ урыныбыҙҙа кәрәк, ә айырым - айырым ғына бындай гүзәллекте тыуҙыра алмаç инек, донъя матур, бөтөн булмаç ине. Беҙ берҙәм булыуыбыҙ менән көслөбөҙ. Ямғырҙан һуң дәррәү килеп сыҡһаҡ ҡына бына ошондай күркәм, ҙур күпер ҡорорға көсөбөҙ етә, дуç булғанда ғына тирә-яҡҡа сағыу нурҙарыбыҙҙы бүләк итә, йәм өçтәй алабыҙ. Әйҙәгеҙ, ағай-апайҙар, дуç булайыҡ, – тигән Шәмәхә.

Миннибаев Аскар,

Өфө калаһы 282-се балалар баксаһы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәкселәре: Ниғмәтова Гөлгөнә Рафиҡ ҡыҙы, Ниғмәтова Нәйлә Зәйнетдин ҡыҙы

Британик

Борон – борон заманда йәшәгән, ти, бер төҙөүсе. Ул бик күп кораблдәр, машиналар төҙөгән. Бер ваҡыт уға бик күңелһеҙ булып киткән дә, оҙаҡ уйлана торғас, үҙенә эш тапҡан – донъяла иң ҙур корабль төҙөргә булған. Тәүҙә ул оҫта корабль төҙөй белеүселәр йыйып алған.

Кораблде төҙөү озон 4 йылға һуҙылған, сөнки кәрәкле деталдәрҙе сит илдәрҙән йыйып алырға тура килгән. Һәм бына ниһайәт тантаналы көн килеп еткән. Деталдәре ҡиммәтле металл – титандан торған, бейеклеге һәм ҙурлығы ун бер этажлы өй тиклем булған, ҙур алты тонналы торбалары әллә ҡайҙан күренеп торған кораблгә «Британик» тип исем биргәндәр. Ул донъяла бер бөртөк, һыуҙа батмай, утта янмай торған корабль булған. Кешеләр шундай ҙур кораблде күреп хайран ҡалғандар һәм барыһының да йөҙөп ҡарағыһы килгән, ти.

Бына бер ваҡыт «Британик» күп юлсыларҙы йыйып беренсе сәйәхәткә сыҡҡан. Ул донъялағы иң тәрән океан – Атлантик океан аша Гренландияға юл тотҡан. Борттағы юлсылар бик ҡыуанғандар, юл буйы бейеп, күңел асып, бөйөк төҙөүсегә дан йырлап барғандар, ти. Диңгеҙҙә уларҙы дельфиндар, киттар, акулалар оҙатып барғандар икән.

Бына күп тә үтмәй, биш көн тигәндә, корабль бөйөк Гренландия ярҙарына килеп туҡтаған. Унда юлсыларҙы хайуандар, ҡоштар ҡаршы алғандар:

«Ура, ниһайәт беҙгә кешеләр килде!», - тип ҡыуанғандар. Кешеләр ҙә Гренландия ерен бик оҡшатҡандар һәм шунда йәшәргә ҡалғандар. Өйҙәр һалғандар, магазиндар, балалар баҡсаһы төҙөгәндәр.

Бөгөнгө көндә лә улар хайуандар, ҡоштар менән бергә татыу ғүмер итәләр икән, ти.

Йәнғолова Азалия,

Өфө калаһы кала округы «52-се Лицей» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы Уҡыусыһы

Етәксеһе: Әбсәләмова Шәүрә Мөхәмәт ҡыҙы

Айыу менән Бүре

Урман ситендә бейек шыршы ағасы янында ике дуҫ - Айыу менән Бүре йәшәгән. Улар гел бергә йөрөгән, аҙыҡты ла бергә тапҡан, бергә ашағандар. Айыу - аҡыллы, йомарт булған, һыуҙа шәп йөҙгән. Ә Бүре шаян, тиктормаҫ, үҙ һүҙле булған.

Бер ваҡыт ҡояшлы иртәлә ике дуҫ балыҡҡа киткән. Юл буйына йырлап, ҡыҙыҡлы хәлдәр һөйләшеп барғандар.

Бына улар күлдә балыҡ тота башлайҙар. Айыуға тик эре, матур балыҡтар, ә Бүрегә, нишләптер, тик бәләкәйҙәре эләгә икән. Бүренең кәйефе төшөп, йәне көйә башлаған. Һәм ул мутлашырға була. Айыу янына бара ла : «Күлдә эре балыҡтар бармы икән? Һин һыуға сумып ҡара әле», - ти икән. Дуҫы, уны - быны уйламай, һыуға төшөп китә. Шуны ғына көтөп торган Бүре, балыҡтарҙы эләктереп ала ла, ҡасып китә. Айыу быға бик асыулана, хәтере ҡала.

Шул ваҡыттан йәнлектәрҙең дуҫлығы бөткән. Бүре дуҫлашырға теләһә лә, Айыу риза булмаған. Ана шулай, дуҫтарым, дуҫлыҡ ҡәҙерен ваҡытында белеү кәрәк шул.

Сәйфетдинов Салауат,

***Өфө калаһы кала округы
128-се мәктәп муниципаль бюджет
дөйөм белем биреү
учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәксеһе: Әхмәтшина Юлиә
Ринат ҡыҙы***

Урал менән әтәс

Бер ауылда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Улар йыл һайын себештәр һатып алып, аҫрар булғандар, ти. Йәйге каникулда йыш ҡына уларға ейәне Урал килер булған. Урал өләсәһенә бик күп эштәрҙә ярҙам иткән: себештәргә ем, һыу биргән, быҙауҙарҙы ҡарап индерешкән, ти.

Быйыл да Урал йәйге каникулды түҙемһеҙләнеп көтөп алған, ти. Уҡыу бөтөү менән ауылға өләсәләренә киткән. Йылдағыса өләсәһе менән олатаһы күп итеп ҡош - ҡорт алған, улар күҙгә күренеп ҙурайғандар, ти. Тик быйыл уларға бер уҫал әтәс эләккән. Ул бөтә балаларҙы ла ҡурҡытып йөрөгән. Әтәс ишек алдында йөрөгәндә хатта Урал да тышҡа сыға алмаған, ти. Ул өйҙә ултырған, йә булмаһа таяҡ тотоп ҡына сығыр булған. Быны күреп, өләсәһе әтәсте әрләп бикләп ҡуя икән. Ләкин әтәс ҡысҡырып, кәртәнән осоп сығырға маташҡан, ти. Шулай уҫал булыуына

ҡарамаҫтан, Урал этәсте иплəп кенə ашатҡан һəм шул уҡ ваҡытта этəс менəн дуҫлашырға телəгəн. Әтəскə ем һалған һайын уға дуҫтары менəн уйнай алмағанын да, үҙе лə ишек алдына сыға алмай ултырыуын да һəм башҡа төрлө хəлдəр тураһында күп тапҡыр һөйлəп маташҡан. Тик этəс тынысланмаған.

Күп ваҡыт үткəн, əллə бикле тороп ялҡыуынан, əллə Уралдың һөйлəгəненəн, этəс тынысланған, хатта балаларҙы ла ҡурҡытмай башлаған. Урал быға бик аптыраған, шул уҡ ваҡытта ҡыуанған да. Шулай Урал этəсте аҡылға ултыртҡан, ти.

Сафиуллина Вилена,

Башҡортостан Республикаһы «2-се республика полилингваль күп профилле гимназияһы» дәүләт бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Етәксеһе: Сафиуллина Ләйсән Рәйес ҡыҙы

Башҡорт теле нисек барлыҡҡа килгән?

Борон - борон заманда йәшәгән, ти, бер ҡарт. Карттың ете улы булған. Кейек аулап, ҡош атып, урмандарҙа йәшәгәндәр улар. Үҙ-ара ым - ҡараштар менән генә аралашҡандар. Ҡайһы саҡ бер-береһен аңлай алмай, ҡылысҡа - ҡылыс, бысаҡҡа - бысаҡ килеп, араларында яуҙар ҙа ҡубып торған. Был хәлгә ҡарт эй бошонған, ти, эй көйөнгән, ти. Ҡарт улдарын татыулаштырыуҙың юлын эҙләй башлаған. Яландар гиҙеп, уйға талған.

- Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ! – тип ҡоштар һауала осоп үткән.
- Без-без-без! – тип безелдәшеп бал ҡорттары бал йыйған.

«Улар бәхетле-е-е! Улар бер-береһен аңлай, – тип уйлап ҡуйған ҡарт. – Үҙ телдәре бар!». Ҡапыл ҡарт ошо уйҙан һикереп тора: «Улдарыма бер-береһен аңлар өсөн тел кәрәк бит!».

«Ҡайҙан, нисек тел табырға?» – тип оҙаҡ баш ватҡан ул. Бер көндө Донъя яралтыусыға уйҙарында өндәшкән: «Һин – иң

бөйөгө улдарымды дуҫлаштырыр тел кәрәк! Уртаҡ тел табыр өсөн юл күрһәт!».

Донъя яралтыусы:

- Мин һиңә доға өйрәтәм! Көн дә доға әйтеп, нурға инеп балҡыған өндәрҙе ҡабатларһың. Шунда улдарың менән бәхетле тормошҡа юл асылыр - тигән. Ҡарт көн дә доға әйткән. Ҡатыны ишетелгән өндәрҙе хәрефтәр итеп һөлгөгә сиккән. Улдары хәрефтәрҙән һүҙҙәр йыйғандар. Ер йөҙөндә матур һүҙҙәр таралған: әсәй, туған, дуҫлыҡ, вәғәҙә, әҙәп...

Шулай итеп, көндән - көн тылсымлы һүҙҙәр күбәйеп, торабара башҡорт теле тип аталып киткән.



Ғәлеев Самат,

Өфө ҡалаһы ҡала округы
«48 – се башҡорт лицейы»
муниципаль бюджет дөйөм белем
биреү учреждениеһы
уҡыусыһы

Етәксеһе: Әхмәҙинурова Айһылыу
Әмир ҡыҙы



Аҡсәскә менән Күксәскә

Борон-борон түгел, ә хәҙерге заманда, тау итәгендә, терегөмөштәй саф һыулы шишмә янында йәшәгән, ти, Аҡсәскә менән Күксәскә. Иртә яҙҙан, йәй аҙағына тиклем йомшаҡ иҫкән елгә шыптырлап, йылы ямғыр тамсыларына иркәләнеп йәшәгән улар. Ҡояшҡай күҙҙәрен асыу менән, Аҡсәскә менән Күксәскә лә уянып, бер - береһен сәләмләгән, шишмә уларҙың дуҫлығына, матурлығына һоҡланып, сылтыраған. Тау итәгендә йәшәгән бөжәктәр ҙә был урынды бик яратҡан. Шишмә атылып сыҡҡан был матур төбәкте йәштәр ҙә, туристар ҙа үҙ иткән. Хатта йыраҡтан килгән бер рәссам зәңгәр күҙле шишмәнең, уның янында бер-береһенә һыйынып ултырған ике ғәжәйеп матур сәскәнең, һүрәтен дә эшләгән, ти.

Шулай бер йылды, тау башынан ҡар һыуҙары ағып төшкән, йылғаларҙа боҙҙар киткән, ә Аҡсәскә менән Күксәскә һаман

күренмәгән. Шишмәкәй тамам аптырауға ҡалған. Йәй буйына тирә - яҡҡа йәм биргән дуҫтарын юғалтыуҙы бик ауыр кисергән ул, күҙ йәштәре суп - суп тамып, һыуы тоҙло булып, йылынып, тәмһеҙләнеп киткән.

Бер иртәлә самауырға шишмә һыуы алырға килгән Айсулпан менән Таңсулпан исемле ҡыҙҙар, шишмәнең тирә - яғындағы сүп - сарҙы күреп, аптырап ҡалғандар. Шишмәгә ярҙамға ашыҡҡандар. Ҡырмыҫҡалар ҙа бәләкәйерәк сыбыҡ-сабыҡты сүп - сар өйөлгән ергә ташыған. Бер быяла шешәне күтәреп алыуға: «Аҡсәскә!», «Күксәскә!» - тип өндәшкән нескә генә тауышты ишетеп, хайран ҡалғандар ҡыҙҙар. Баҡтиһәң, сәскәләр, ауыр шешәне күтәреп сыға алмай, һабаҡтары ситкә китеп, яфаланған икән. Айсулпан менән Таңсулпан сәскәләрҙең һабағын ипләп кенә һыйпаған. «Аҡсәскә!», «Күксәскә!» - тип шыбырҙашҡан сәскәләр. Уларҙың тауышын ишетеп, ярҙамсыл, оло йөрәкле кешеләргә рәхмәт йөҙөнән, ләйсән ямғыры һибәләп уҙған, күктә яҙғы сағыу ҡояш балҡыған. Тирә - яҡта аллы - гөллө күбәләктәр өйөрөлгән, Аҡсәскә Күксәскәгә һыйынған.

Шатлығынан сылтырай - сылтырай ары йүгергән шишмәнең һыуына ла элекке тәме, һалҡынлығы, сафлығы кире ҡайтҡан, ти.

Мельникова Әҙилә,

Өфө калаһы кала округы 306–сы балалар баҡсаһы муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Әхмәтгәрәева Элвина Айрат ҡыҙы

Нисек боҙ барлыҡҡа килгән?

Борон - борон заманда, ҡыштар һыуыҡ булғанда, йылға-күлдәр боҙһоҙ булғандар, ти. Балыҡтар, һыу йәнлектәре ҡышты яратмағандар. Был һалҡын ваҡытты бик насар кисергәндәр.

Бер көндө, Йәйен бар балыҡтарҙы йыйған да былай тигән:

- Дуҫтар! Ҡыш бабайға барырға һәм ҡышын беҙгә һыуыҡта йәшәргә ҡыйынлашыуы тураһында әйтергә кәрәк.

Балыҡтар бер - береһенә ҡарашҡандар. Суртан былай тигән:

- Мин барам Ҡыш бабай янына.

Балыҡтар ризалашып, Йәйен менән Суртанды оҙон юлға оҙатҡандар. Бик күп ваҡыт йөҙөп барғандан һуң, улар Ҡыш бабай янына йөҙөп барып еткәндәр.

Ҡыш бабай балыҡтарҙы тыңлап, уйға батҡан,ти. Өс көн, өс төн уйлағас, балыҡтарға нисек итеп ярҙам итергә уйлап тапҡан.

Шунан, Ҡыш бабай бар күлдәрҙе, йылғаларҙы үтә күренмәле ҡышҡы быяла менән ҡаплаған, ти. Шул көндән алып балыҡтар, һыу йәнлектәре ҡышын һыу аҫтында өшөмәй башлаған. Ә ҡышҡы быяланы боҙ тип атағандар, ти.

Торсонбаева Лилиә,

Өфө ҡалаһы ҡала округы «308 - се башҡорт балалар баҡсаһы» муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәкселәре: Мөхәмәҙиева Лилиә Фазыл ҡыҙы Рәхимова Гөләйшә Риф ҡыҙы

Шешҡолаҡ һәм балалар баҡсаһы

Йәшәгән, ти, бер Шешҡолаҡ исемле ҡуян балаһы. Уның атаһы, әсәһе булған. Улар бик татыу йәшәгәндәр. Көндөҙ атаһы менән әсәһе эшләгәндәр, ә Шешҡолаҡ балалар баҡсаһына йөрөгән. Тик көндә ҡуянҡай атаһы менән әсәһе уны баҡсанан алырға онотоп ҡуймаһындар тип борсолған, баҡсаға йөрөргә бөтөнләй яратмаған. Хатта ҡайһы ваҡыт баҡсала илап та ала, ти. Тәрбиәсе апайҙар нисек кенә уны йыуатһалар ҙа, Шешҡолаҡ атаһы йәки әсәһе килһә генә тыныслана икән.

Бер көндө иртәнсәк баҡсала ҡалдырыр алдынан әсәһе Шешҡолаҡҡа әйткән:

– Бөгөн мин һине һуңыраҡ килеп алырмын. Эшем бигерәк күбәйеп китте. Һин борсолма, мин һине мотлаҡ килеп алам, тик әҙерәк һуңыраҡ. Шешҡолаҡтың бөтөнләй кәйефе төшкән. Тик шул көндө уның төркөмөнә Оҙонғолаҡ исемле яңы ҡуян - малай

килгән. Шешҡолаҡ менән Оҙонғолаҡ танышып алғандар. Бергә зарядка эшләгәндәр, бергә ултырып бутҡа ашағандар. Дуҫлашып та киткәндәр, ти. Көнө буйы был икәү уйнағандар. Йә машина эткәндәр, йә кубиктарҙан бейек өй яһағандар, һүрәт төшөргәндәр, йә пазл йыйғандар. Шулай итеп кис етеүен һиҙмәй ҙә ҡалғандар.

– Шешҡолаҡ, йыйын, әсәйең килде! – тигәнде ишеткәс ҡуянҡай аптырап ҡалған.

– Кис тә еттеме ни? Мин бит әле уйнап туйманым! – ти икән.

Оҙонғолаҡ менән иртәгә лә бергә уйнарға һөйләшеп, Шешҡолаҡ ҡайтып китә. Оҙаҡламай Оҙонғолаҡты ла әсәһе килеп ала. Ошо көндән алып ике ҡуян балаһы баҡсала ҡалырға ҡурҡмай башлаған. Улай ғына түгел, балалар баҡсаһын ныҡ итеп ярата башлағандар, ти. Улар хәҙер ваҡыт үткәнен һиҙмәй ҙә ҡала икән.



Миңнулина Әминә,

Өфө калаһы кала округы «Мөхәмәт Искужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Етәксеһе: Солтанова Гөлфирә Мөхәмәт ҡыҙы

Айгүзәлдең сере

Йәшәгән, ти, Айгүзәл исемле ҡыҙ. Айгүзәл ғаиләһе менән тәбиғәтте бик яраталар. Шуға ла ул йәйге каникул башланыу менән өләсәһенә ауылға ҡунаҡҡа бара, ти. Ауылда ҡыҙ үҙенә дуҫтар таба. Улар бергә уйнай, эшләй, еләк - емешкә йөрөйҙәр.

Балалар йылға буйына барып һыу төшәләр. Яр буйында ҡояштың йылы нуры аҫтында, ҡыҙыналар. Малайҙар балыҡ тотһа, ҡыҙҙар сәскәләрҙән таж үрә. Айгүзәл шулай ҡырға сыҡҡан һайын тиҙ генә яр буйлап йөрөп, тирә - яҡта осраған сүп - сарҙы йыйыр булған. Балалар рәхәтләнеп уйнап туйып ҡайтҡанда, Айгүзәл буш ҡул түгел, баяғы сүп - сар, пластик һәм быяла шешә, консерва банка, быяла ярсыҡтарын күтәреп, ҡайтыр булған. Дуҫ - иштәре ҡыҙҙы сәйер тип һанайҙар, ти, хатта ҡайһы бер бала көлөп тә ҡуйған. Әммә Айгүзәл бер ҙә үпкәләмәгән. Ул ҡасан да булһа дуҫтары уны аңлауына ышанған.

Шулай итеп емеш - еләк мәле лә килеп еткән. Ҡыҙҙар һәм малайҙар күмәкләшеп еләккә сыға башлаған. Нисә ҡырға сыҡһалар ҙа тик Айгүзәлдең һауыты эре, ҡып - ҡыҙыл еләк менән мөлдөрәмә итеп тулған. Шулай уҡ уның юлына болонда булған иң матур, иң хуш еҫле сәскәләр осраған, ти. Тәбиғәт Айгүзәлдең ихласлығы өсөн рәхмәт итеп, үҙенән ошондай бүләк алдына сығарып һалған.

Балалар һуңынан серҙең нимәлә икәнен, әлбиттә, аңлағандар. Айгүзәлдән үрнәк алып, улар ҙа тәбиғәтте һаҡлауҙа, ҡурсалауҙа үҙҙәренең ҙур өлөшөн индергәндәр!

Ҡоломбәтов Салауат,

Өфө ҡалаһы ҡала округы «308 - се башҡорт балалар баҡсаһы» муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Ҡоломбәтова Рузилә Ишбулат ҡыҙы

Эт

Борон - борон заманда урманда йәшәгән, ти, бер эт. Уның йәшәргә өйө лә булмаған, ашарға аҙығы ла булмаған.

Бер көнө ул айыу байға барған, ти.

- Айыу ағай, мине үҙеңә йәшәргә ал әле, - тигән.

- Әйҙә һуң! - тигән айыу.

Улар икеһе йәшәй башлаған. Эт айыуҙың балы, емеш-еләге менән һыйлана икән, ә үҙе умарта ла ҡарай алмаған, еләк тә йыя белмәгән.

- Икебеҙҙе туйҙырыуы миңә ауыр булыр ул, алда оҙон ҡыштар тора, - тигән айыу.

Эт сығып киткән.

Урман буйлап китеп барһа, терпе осраған, ти. Эт терпелә йәшәргә һораған. Бергә йәшәй башлағандар. Терпе көн дә бәшмәк, емештәр йыйып ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгән. Эт иһә тик ятҡан.

Терпе һорай,ти:

- Һин ниңә ҡышҡылыҡҡа әҙерләнмәйһең?

- Мин бит бәшмәк ашамайым - тип яуап биргән эт.

Терпе әфәнденән дә сығып китергә мәжбүр булған. Китеп барһа, уға кеше осраған ти.

- Ҡайҙа юл тоттоң? - тип һораған кеше.

- Мин үҙемә йәшәргә ер эҙләйем.

- Әйҙә, миңә эшкә кил. Йәйен көтөүемде көтөрһөң, ҡышын ишек алдын һаҡларһың! - тигән кеше.

Шунан башлап эт кешегә хеҙмәт итә башлаған. Ә кеше уға оя эшләп биргән, көн дә ашатып торған.

Мәғәсүмов Адиль,

Өфө калаһы кала округы «308-се башҡорт балалар баҡсаһы» муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Исҡужина Нәзифә Зиннәтулла ҡыҙы

Терпе менән ҡуян

Борон - борон заманда йәшәгән, ти, ҡуян менән терпе. Бер көндө терпе ҡуянды ҡунаҡҡа саҡырған. Ҡуян ҡыуана - ҡыуана күстәнәскә татлы кәнфиттәр алып килергә булған. Сөнки ул үҙе бик нык ярата уларҙы. Терпегә лә оҡшар тип уйлаған. Ләкин терпе был кәнфиттәрҙе күреп, ҡуянға былай тигән:

- Ҡуян дуҫым, кәнфит тәмлелеккә тәмле лә ул, әммә ул тештәргә бик ҙур зыян килтерә, - тигән.

Ҡуян быны ишетеп, терпегә:

- Хи-хи-хи, һинең алмаларың да бик татлы, улар зыян түгелме? Юҡ, мин быға ышанмайым!

Шулай бәхәсләшкәндән һуң да ҡуян дуҫын тыңламаған. Күстәнәскә алып килгән кәнфиттәрен ашай - ашай ҡайтып киткән. Бер заман ҡуяндың илаған тауышын ишетеп, терпе йүгереп килеп еткән:

- Нимә булды, ҡуян дуҫым? Ниңә улай илайһың? - тип һораған.

Ҡуян моңһоу ғына тауышы менән:

- Терпе дуҫ, һин миңә дөрөҫ кәңәш биргәнһең икән. Минең ысынлап та күп кәнфит ашауҙан тештәрем һыҙлай башланы.

- Эх, ҡуян дуҫ, ярай, ҡайғырма. Хәҙер айыу ағайға барайыҡ, ул шифалы үләндәр менән һине дауалар һәм ауыртыуҙарың бөтөр. Шул көндән алып ҡуян башҡа кәнфит ашамай башлаған. Терпегә ҡарап файҙалы ашамлыҡтар менән генә туҡлана икән, сөнки кәнфитте алмаштырырлыҡ башҡа татлы ризыҡтар барлығын аңлаған.

Камалова Диана,

Өфө калаһы кала округы
128-се мәктәп
муниципаль бюджет дөйөм белем
биреү учреждениеһы
уҡыусыһы

Етәксеһе: Әхмәтшина Юлиә
Ринат ҡыҙы



Уйынсыҡтарын йыймаған ҡыҙ

Борон - борон заманда йәшәгән, ти, Миләүшә исемле бер ҡыҙ. Миләүшә ата - әсәһенең бер бөртөк кенә балалары булғас, бик иркә генә итеп үҫтергәндәр. Ата - әсәһе уны бер нәмәнән мәхрүм итмәй, ҡыҙҙарының бөтә һорағандарын алып биргәндәр, ти. Миләүшәнең уйынсыҡтары шул тиклем күп булған, ул бөтә бүлмә буйлап туҙырап ятҡан. Ата - әсәһе көн һайын, ҡыҙы уйнағандан һуң, уйынсыҡтарҙы үҙҙәре йыйып ҡуйған, ти. Миләүшә уйынсыҡты яңы сағында уйнай ҙа, тағы һелтәп ҡуя икән. Нисек кенә булмаһын, уйынсыҡтар һәр ваҡыт йыйыштырылмай ҡала, ти. Шулай бер көндө Миләүшә әсәһе менән магазинға барырға була. Ә магазинда бик күп ҡурсаҡтар килгән булған. Миләүшә магазинға килеп ингәс тә, күҙе бер матур ҡурсаҡҡа төшә. Шунан әсәһенә мыжый башлай:
- Әсә-ә-әй! Миңә шул ҡурсаҡты алып бир әле, - тигән.

Шул вак̒ыт һатыусы апай:

- К̒урсак̒тың һиңә барғыһы килмәй шул. Сөнки Миләүшә уйнап туйғас та мине ултырғыс аҫтына ташлап к̒уясак̒, ә бында мин өҫтә, таҙа ерҙә ултырам, тип, уйлай к̒урсак̒ – тигән.

К̒ыҙык̒ай был һүҙҙәрҙе ишеткәс, йүгереп өйөнә к̒айтып китә лә, бөтә туҙырап ятк̒ан уйынсык̒тарын йыйыштырып к̒уя. Ә уйынсык̒тар уға рәхмәт әйтеп, йылмаялар кеүек тойола.

Иртәгәһенә әсәһе менән Миләүшә тағы магазинға бара. Ни күҙе менән күрһен, теге к̒урсак̒ аҫк̒ы рәткә төшөп, көтөп ултыра икән.

Рәимов Данис,

***Өфө ҡалаһы ҡала округы
«Р.Т. Бикбаев исемендәге
102 - се башҡорт гимназияһы»
муниципаль бюджет дөйөм белем
биреү учреждениеһы
уҡыусыһы***

***Етәксеһе: Хужәхмәтова Гөлсирә
Фәрит ҡыҙы***

Ысын дуҫлыҡ

Борон - борон заманда урманда биш йәнлек йәшәгән, ти. Шаян йүгерек ҡуян, Төлкөбикә, Һоро бүре, Бәләкәй генә терпе һәм Тайыштабан айыу. Бер көндө Терпекәй алма йыйырға булған. Ағастар араһында эй өйрөлгән, эй өйрөлгән, әммә бер алма ла тапмаған. Эсе бошоп, буш кәрзинен тотоп, ҡайтырға булған. Китеп барһа, ни күрә? Урман ситенең бер мөйөшөндә генә ҡып-ҡыҙыл алмалы ағастар үҫеп ултыра! «Бына бит таптым! Их тәмлелер инде! Ҡып - ҡыҙыл ғына, баллы ғына», - тип, йүгереп, ағасҡа еттем генә тигәндә, ваҡ ботаҡтарға аяғы эләгеп, ҙур соҡорға ҡолап төшә.

- Был соҡорҙан хәҙер нисек сығам инде? – тип, һығылып илай башлаған. Шул ваҡытта япраҡ ҡыштырлаған тауыш ишетеп ҡала Терпекәй.

- Кем бар унда? Мин соҡорға осоп төштөм, ҡотҡарығыҙ! – тип

ҡысҡырған Терпекәй. Матур ҡойроғона һокланып Төлкөбикә йөрөп ята икән, ти.

- Эй меҫкен! Һинең менән булышып ултырырға ваҡытым юҡ! Эштәрем күп. Сығырһың әле! - тип, Терпекәй эргәһенәнән эре генә баҫып үтеп киткән.

- Инде нисек кенә сығырға? - тип, илауын дауам итә меҫкен Терпекәй. Тағы ла кемдер йөрөгәнен һиҙеп ҡала.

- Кем бар унда? Мин соҡорға осоп төштөм, сыға алмайым. Зинһар, ҡотҡарығыҙ!..

- Берәй тәмле генә ҡуян ултыра икән, тип шатланһам, ә был һин икәнһең, меҫкенкәй! Эх һин! – тип һунарын дауам итә Һоро бүре. Инде бүре лә ярҙам итмәгәс, Терпекәй илауын дауам итә. Тағы шарт - шорт иткән тауыш ишетеп ҡала.

- Кем бар унда? Мин соҡорға осоп төштөм, сыға алмайым. Ярҙам итегеҙ, зинһар, ҡотҡарығыҙ! - тип илай-илай ҡысҡыра, ти.

Ә унда биҙрәһен тотоп, Тайыштабан айыу йөрөп ята икән.

- Юҡ инде! Күптән төш ваҡыты етте, мин һаман ас! Һинең менән ваҡыт әрәм итеп ултырһам, күлдәге балыҡтарымды тотоп бөтәләр. Мин киттем балыҡҡа. Хуш, Терпекәй! - тип, яйлап ҡына юлын дауам итә Тайыштабан. Ә Терпекәй уға:

- Туҡта әле, Айыу ағай! Балығың көтөп торор! Мине йәһәт кенә сығарырһың да, балыҡты икәүләп тоторбоҙ, - тип, ҡысҡыра икән. Ә Тайыштабан айыу, мыҫҡыллы ғына көлөп, тиҙерәк тайыу яғын ҡарай. Өмөтөн бөтөнләй юғалтҡан Терпекәй, илай-илай йоҡлап китә. Йоҡо аралаш кемдеңдер һикереп - һикереп,

соҡор янына яҡынайғанын ишетеп, тертләп уянып китә. Йырлай-йырлай һикереүсе Шаян йүгерек ҡуян дуҫының тауышын танып:

- Эй, Ҡуян дуҫ! Аяҡ аҫтыңа ҡарап һикер! Минең һымаҡ соҡорға ҡолап төшмә! Абай бул! – тип, ҡысҡырған.

Дуҫы Терпекәйҙең тауышын ишетеп, Шаян йүгерек ҡуян аптырап ҡала. Тауыш килгән соҡор янына килеп:

- Рәхмәт, дуҫым Терпекәй! Һикерә башлаһам, һаҡлыҡты онотам да ҡуям бит. Хәҙер сығарам һине, оҙон ботаҡтар ғына табам да, - тип дуҫын бәләнән ҡотҡара.

Хәлилова Алтынай,

Өфө калаһы кала округы «Аҡбуҙат» 75-се башҡорт балалар баҡсаһы» муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Абдуллина Айһылыу Данил ҡыҙы

Терпенең энәле кейеме

Борон - борон заманда Урман батшалығында йәшәгән, ти, терпе ғаиләһе. Улар бик матур, татыу ғүмер иткән. Әсә терпе оҫта тегенсе булған. Ҡупшы, йылы, уңайлы итеп ғаиләһен кейендергән. Тегенсе булыуының бүтән йәнлектәргә лә файҙаһы тейгән, ти. Улар ҙа Әсә терпенән үҙҙәренә кәрәк нәмәне тектереп алған.

Бер көндө Әсә терпе бәшмәк йыйырға урманға сығып киткән. Үҙе менән энәләрен дә алған, ти. Сөнки йәнлектәр уға теләһә ҡасан, хатта юлда осрап та, кейем тегеп биреүен һорап мөрәжәғәт иткән. Ә был уйлап та тормай, шунда уҡ ярҙамға килә икән.

Шулай бара торғас, ҡаршыһына күптән унан көнләшеп йөрөгән хәйләкәр Төлкө килеп сыға. Әсә терпе ҡурҡышынан ҡулындағы бөтә энәләрен кейеменең арткы яғы тирәләй тырпайтып ҡаҙап ҡуя. Уны ашарға йыйынған Төлкө, морондары

яңғыратып ҡысҡырып ебәрә лә, табанын ялтырата.

Һуңынан Әсә терпе үҙенә, балаларына, бөтә яҡындарына һәм туғандарына энәле кейем тегеп биргән. Хәҙер терпеләр уны бер ҙә сисмәй икән.

Хәбирова Аида,

Өфө калаһы кала округы «Мостай Кәрим исемендәге 158 –се гимназия» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы укыусыһы

Етәксеһе: Ҡорбанғолова Гөлфиә Айҙар ҡыҙы

Тәртипһеҙ ҡыҙ

Борон - борон заманда түгел, ә беҙҙең заманда йәшәгән, ти, Айгөл исемле ҡыҙ. Ул бик уҫал, үҙһүҙле, тәртипһеҙ булған, ти. Уның менән берәү ҙә уйнарға яратмаған. Мәктәптә тәртибе өсөн гел икеле билдәһе алған, ти.

Берҙән - бер көндө ата - әсәһе Айгөлдө тәртибе өсөн әрләгәндәр, ти. Ҡыҙыҡай үпкәләп урманға сығып киткән. Бара торғас аҙашҡан, асыҡҡан, ҡараңғынан ҡурҡа башлаған.

Бер мәл ҡаршыһына ҙур айыу килеп сыҡҡан, ти.

- Ындай ҡараңғы урманда нимә эшләп йөрөйһөң? - тип һораған айыу.

- Мине берәү ҙә яратмай, әрләйҙәр. Мин үпкәләп урманға ҡастым.

- Улайһа әйҙә беҙгә. Минең балаларым менән бергә йәшәрһең, - тип Айгөлдө өйөнә алып ҡайтып киткән айыу.

Шулай итеп Айгөл айыуҙар менән йәшәй башлаған. Айыуҙың

төпсөк балаһы тәртипһеҙ, үҙһүҙле, ти. Туғандары менән талашҡан, әсәһе менән телләшкән, ти. Айгөл уға ҡарап үҙен таныған, ҡыҙға бик оят булып киткән, ти.

- Мин үҙемдең хатамды аңланым. Башҡа бер ваҡытта ла тәртипһеҙ булмаясаҡмын. Миңә өйөмә ҡайтырға ярҙам итегеҙ әле, зинһар! - тип айыуға ялбарған, ти.

Айыу ҡыҙҙы маҡтап өйөнә юл күрһәткән. Шул көндән башлап Айгөл ата - әсәһен гел тыңлап, дуҫтары менән татыу йәшәй, ти.

Тихонова Даяна,

Өфө ҡалаһы ҡала округы 271-се балалар баҡсаһы муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәкселәре: Сафина Гөлназ Шәйхәйҙәр ҡыҙы, Рәхмәтуллина Элвира Радик ҡыҙы, Хоҙайғолова Ләйсән Хәмит ҡыҙы.

Баҡа сәйәхәте

Зәңгәр күлдә бер баҡа йәшәгән, ти. Иртә яҙҙан алып ҡара көҙгә тиклем, был баҡа дуҫтары менән һөйләшергә яратҡан. Көҙ еткәс, баҡалар һөйләшеүҙән туҡтаған. Был баҡаға бик күңелһеҙ булып киткән. Шуға күрә ул башҡа күл эҙләп сәйәхәткә сығып киткән. Юлында уға терпе осраған.

- Был һыуыҡта ҡайҙа китеп бараһың ? - тип һораған.
- Баҡалар йоҡоға китеп бөттө, минең менән береһе лә һөйләшмәй, күл эҙләп китеп барамын, - тигән.

Терпе:

- Оҙаҡламай ҡыш етә, күлеңә ҡайт, үҙ өйөңдә яҡшыраҡ - тигән.

Тик баҡа терпене тыңламаған, артабан юлын дауам иткән. Бер күлгә барып еткән, тик бында ла тып - тын икән. Йылы яҡҡа осоусы ҡоштар ғына үҙ-ара һайрашалар, ти. Яңы урында уға бөтөнләй оҡшамаған. Был күлдә лә уның менән һөйләшеүсе

табылмаған, барыһы ла һалҡын ҡышҡа әҙерләнгәндәр. Баҡа үҙ күленә ҡайтырға булған, тик ул бик өшөгән, хатта ҡыбырларлыҡ та хәле булмаған, ти икән. Йылы яҡҡа осорға йыйынған ҡоштар уға ярҙам итергә булғандар, баҡаны үҙ күленә алып барғандар. Бына шулай, тыуған ерҙә яҡшыраҡ шул.

Мотаһарова Рушана,

Өфө ҡалаһы ҡала округы «102-се башҡорт балалар баҡсаһы» муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Мотаһарова Нәйлә Иштуған ҡыҙы

Ҡуян дуҫ

Борон - борон заманда бейек тауҙар артында, ҡуйы урман эсендә, сылтырап аҡҡан шишмә буйында Төлкөбикә йәшәгән,ти. Йәмле йәйҙең бер көнөндә Төлкөбикәгә бик күңелһеҙ булып киткән. Сөнки ул урмандағы барлыҡ йәнлектәр араһында йә алдашып, йә маҡтанып йөрөй торғас, бер үҙе дуҫтарһыҙ тороп ҡалған, ти. Ҡайҙа барһа ла, һин хәйләкәр, алдаҡсы тип унан ҡасалар икән. Был Төлкөнө бик борсоған. Шунан Төлкөбикә үҙенә дуҫ эҙләй башлаған.

Урманда иң көслө Айыуға килгән дә дуҫ булырға тәкдим иткән. Айыу Төлкөнө тыңлап та тормаған, ары киткән. Шунан Төлкө ҡыуаҡ төбөндә ҡалтыранып ҡурҡып ултырған Ҡуянды күреп ҡалған. Уның янына килгән дә:
- Ҡуян, әйҙә дуҫ булайыҡ. Мин һине бер ҡасан да алдамаҫмын. Һине берәйһе үпкәләтһә - яҡлашырмын, - тигән, ти.

Ҡуян ҙур теләк менән ризалашҡан. Шул көндән алып улар дуҫ булып йәшәйҙәр, ти. Бер - береһенә ҡунаҡҡа йөрөйҙәр, бер кемдән, бер нимәнән дә ҡурҡмайҙар. Уларҙың дуҫлығына барыһы ла һоҡланып ҡарайҙар, ти.

Нурмөхәмәтов Инсаф,

Өфө калаһы кала округы «Фатима Мостафина исемендәге 20 - се Өфө кала башкорт гимназияһы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы Укыусыһы

Етәксеһе: Латыпова Динара Рәжәп кызы

Ике йондоҙ

Йыһанда, Орион йондоҙлоғо эргәһендә, йәшәгән, ти, бәләкәс кенә матур йондоҙ. Уны бер кем дә белмәгән, ти. Бәләкәй йондоҙсоҡ бер мәл эргәһендә тағы ла бер бәләкәй генә йондоҙҙо күрҙе. Икенсе төндә ул теге бәләкәй йондоҙға китте. Һәм уға: «Һинең менән дуҫлашырға теләйем», - тине. Теге лә бик теләп ризалашҡан һәм улар бергәләп шатланышып йыһан буйлап йөрөй башлағандар. Улар, өйҙәренән алыҫлашып, аҙашып киткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалдылар. Тыуған яғына юл эҙләргә тотонғандар, ләкин таба алмағандар. Улар, юлды һорар өсөн, башҡа планеталарҙы һәм йондоҙҙарҙы эҙләй башлағандар. Тәүгеһе булып, уларға сәйер, Юпитер ҡушаматлы планета эләккән. Йондоҙҙар Юпитерҙан: «Беҙ уйнап йөрөп, аҙаштыҡ. Ул Орион йондоҙлоғо эргәһендә ине. Беҙгә юлды өйрәтә алмаҫһыңмы икән?» - тип һорағандар. Юпитер әйтеүенсә, был районды ул белмәй, ә уның картаһы юҡ. Юпитер

уларға ҡустыһы Сатурнға барырға тәкдим иткән. Ләкин Сатурндың да йондоҙҙарға кәрәкле картаһы булмаған. Шул саҡта ул йондоҙҙарҙы үҙенең дуҫы Нептунға барырға ҡушҡан. Йондоҙҙар уға ҡарай осҡандар. Юлда «ҡара тишеккә» саҡ ҡолап төшмәгәндәр, ниһайәт, барып еткәндәр,ти.

Нептундың йондоҙҙарға кәрәкле картаһы булған. Ул кәрәкле районды йондоҙҙарға күрһәтеп, кометаны саҡырған һәм уларҙы өйҙәренә алып ҡайтыуын һораған. Йондоҙҙар кометаға ултырып, өйөнә бер нисә минут эсендә килеп еткәндәр. Улар комета менән бик дуҫлашып киткәндәр. Шул ваҡыттан улар йыһан буйлап бергәләп сәйәхәт итә башлағандар, ти.

Төн еткәс, күккә ҡараһағыҙ, һеҙгә ҡарап йым - йым иткән йондоҙҙарҙы күрһәгеҙ, шул ике шаян йондоҙ сәйәхәт итеп йөрөп, беҙҙең планетабыҙға һоҡланып ҡарап йөрөгән булалыр әле!

Тимербаева Азалина,

Өфө калаһы кала округы «Фатима Мостафина исемендәге 20 - се Өфө кала башҡорт гимназияһы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Етәксеһе: Кәлиева Айгөл Әбделнәфиҡ ҡыҙы

Ҡуянбай

Борон - борон заманда, урманда булған, ти, был хәл. Йәмле йәй айҙары үтеп киткәс, йәнлек балалары мәктәпкә йыйынғандар. Тик Ҡуянбай ғына уҡырға йөрөргә теләмәгән. Уның һаман да уйнағыһы килгән.

Бына 1 сентябрь еткән. Бөтә балалар ҙа матур гөлләмәләр тотоп мәктәпкә юлланғандар. Ә Ҡуянбай йоҡлап ҡалған.

Беренсе синыф уҡыусыларына тәүге көн үк Әлифба таратып биргәндәр. Өйҙәренә ҡайтҡас, шундай сағыу һүрәтле китаптан балалар айырыла алмағандар. Көнө буйы ҡыҙыҡһынып ҡарағандар. Ҡуянбай йоҡоһон туйҙырып алғас, тағы ла урамға сығып сапҡан. Ҡараңғы төшкәнсе уйнаған да, икенсе көнгә лә дәрескә бармай йоҡлап ҡалған. Мәктәптә көндән - көн яңы хәрефтәр өйрәнгәндәр. Уҡырға, яҙырға, матур итеп һөйләргә лә өйрәткәндәр. Ә Ҡуянбай һаман урам ҡыҙырыуын белгән.

Бер көндө Тейенбикә барыһын да тыуған көнөнә саҡырған. Өҫтәл янына ултырғас, ҡунаҡтар өй хужаһын тәбрикләй башлағандар. Һәр кем һүрәт төшөрөп алып килгән икән. Аҫтына исем-шәрифтәрен дә яҙып ҡуйғандар. Сират Ҡуянбайға еткәс урынынан торған да, ауыҙына һыу алған шикелле, бер һүҙ ҙә әйтә алмай ҡатып ҡалған. Алып килгән бүләген Тейенбикәнең ҡулына тотторған да, оялышынан ишектән атлығып сығып киткән.

Икенсе көн таң менән, бөтәһенән дә алдараҡ, мәктәп тупһаһына килеп баҫҡан. Шул көндән алып ул бик тырышып уҡый башлаған. Белеме барҙың – ҡәҙере бар икәнде яҡшы төшөнгән Ҡуянбай.



Юлдашбаева Альбина,

Өфө калаһы кала округы «Мөхәмәт Искужин исемендәге 136 - сы башҡорт лицейы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы

Етәксеһе: Саматова Гөлнара Ринат ҡыҙы

Бесәй менән сысҡан

Йәшәгән, ти, бер өйҙә бесәй менән сысҡан. Улар дуҫ булғандар. Бесәй ҡайҙа барһа ла, сысҡанды гел үҙе менән йөрөткән. Тора - бара бесәй ялҡауға әйләнә башлаған, ти. Сысҡан менән уйнағыһы ла, тышҡа сығып йөрөгөһө лә килмәй башлаған. Тик йоҡлау яғын ғына уйлап йөрөгән. Уянып кирелеп ала ла, ашай башлай, ти, аҙаҡ тағы ла йоҡларға ята икән. Ә сысҡан етеҙ, шаян булғас өйҙә генә ултырғыһы килмәгән. Уның бесәй менән уйнағыһы килгән, тик бесәйҙең йоҡлауы арҡаһында уйнай алмаған. Ул теге тишеккә лә, был тишеккә инеп сыға икән. Уға күңелһеҙ була башлаған. Былай йәшәү ялҡытҡан. Бесәйҙән сығып китергә булған.

Бер көндө бесәй йоҡоһонан уянып китһә, сысҡан юҡ, ти. Эй, ҡараған, эй эҙләгән, әммә сысҡан күренмәгән. Бесәй бөтә көсөн йыйып, йоҡоһон онотоп сысҡанды эҙләп сығып киткән, ти.

Тегендә ҡараһа ла юҡ, бында ла юҡ, - сысҡандан елдәр иҫкән. Бесәйҙең быға ныҡ итеп асыуы килгән. Шунан башлап, хәҙер бесәй менән сысҡандың дуҫлығы бөткән, шуға улар сысҡанды тотоп ашарға әҙер генә тора, ти.

Нурмөхәмәтов Динислам,

Өфө ҡалаһы ҡала округы «166 - сы башҡорт балалар баҡсаһы» муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Нурмөхәмәтова Роза Азат ҡыҙы

Төштәге мажара

Йәшәгән, ти, ир менән ҡатын. Уларҙың Уйнарбай исемле улдары булған, ти. Нығ иркәләткәндәр, ти, малайҙарын. Улы ялҡау һәм тыңламаусан булып үҫкән, ти. Бөтә ваҡытын компьютерҙа, планшетта, смартфонда уйнап үткәргән.

Бер көндө атаһы уға сәйер уйын бүләк иткән. Ул «Еңелһәң - башҡаса сыҡмаҫһың» тип аталған. Уйнарбай шунда уйнай башлаған. Ул оҙаҡ уйнай, бер нәмә лә килеп сыҡмай, ә иң ҡыйыны, уйындан да сыға алмай икән. Кис етте. Уйнарбай компьютерын һүндермәй генә йоҡларға ятҡан. Төшөндә лә яңы уйынын уйнаған. Ул иртәнсәк тағы компьютерҙа шул уҡ уйынды уйнай башлаған.

Тағы ла унан сыға алмаған, ти. Төндә Уйнарбай ҡурҡыныс төш күргән. Йәнәһе, ул йоҡоһонан уянғас, стенала тишек күреп ҡалған, унда ҡояштың яҡтырғанын күреп, уға барып ҡарай

башлаған. Был тишектә уйындағы өс башлы ҡурҡыныс аждаһаны күргән. Уйнарбай ҡурҡып аждаһанан ҡасып киткән. Аждаһа уның артынан төрлө яуыз хайуандарҙы ебәргән. Аждаһа үҙе алға осоп киткән.

Ниһайәт, Уйнарбай эҙәрлекләүселәрҙән ҡасҡан. Малай өйөнә юл эҙләй башлаған. Әммә таба алмаған. Шул ваҡыт, аждаһа уның яғаһынан тотоп алған да, ер өҫтөнән бейек итеп күтәреп, ҡурҡыныс тауыш менән: «Хәҙер һин минән ҡаса алмайһың!» - тип шыбырлаған. «Теймә миңә, мин башҡа улайтмайым. Мин һәйбәт булырмын». «Ата-әсәңде тыңларһыңмы?» - аждаһа тағы ла яманыраҡ тауыш менән бышылдаған. «Тыңлармын», - тип ризалашҡан малай. «Ә компьютерҙа уйнарһыңмы?»-тип һораған. «Компьютер артында ла ултырмам», - тип яуаплаған, малай. Аждаһа Уйнарбайҙы ысҡындырҙы ла, юҡ булды. Малайҙың ҡаршыһына асыҡ ишек килеп сыҡҡан. Ул тиҙ генә шул бүлмәгә инеп өйгә эләккән һәм йоҡоһонан уянған. Шунда уҡ атаһы менән әсәһе янына ташланған, уларҙы ҡосаҡлап, ғәфү үтенгән, тыңлаусан малай булырға вәғәҙә биргән.

Әбүбәкерова Шәүрә,

Өфө калаһы кала округы 109 - сы балалар баксаһы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Күсемова Лүзиә Ғәлимйән кыҙы

Балыктар ни өсөн тәңкәле?

Борон - борон заманда, йәшәгән, ти, бер бай. Унын кыҙҙары һыу буйында уйнарға яраткан. Кабырсактар, төрлө төҫтәге таштар йыйып күңел асҡандар, ти, улар.

Бер ваҡыт байҙың иң яраткан кесе кыҙы һыуға йөҙөгөн төшөрөп ебәргән. Оҙак эҙләгәндәр кыҙҙар, таба алмай атаһына кайтып һөйләгәндәр. Бай тирә - яктағы барлык йәнлек, коштарҙы йыйып былай тигән:

- Кем кыҙымдың йөҙөгөн таба, шуға күп итеп көмөш тәңкәләр бирәм. Байлығымдан ҙур өлөш сығарам! - тигән.

Был һүҙҙәрҙе балыктар ҙа ишетеп торғандар. Йәнлектәр һыуға килеп еткәнсе, йөҙөктө табып уҡ килтергәндәр, ти.

Бай бик шатланған. Әйткән һүҙендә торған - һыуға күп итеп көмөш тәңкәләр һипкән, ти. Һыуҙағы балыктың барыһына ла еткән. Балык тәненә тәңкәләр бик килешкән, ти.

Быны күреп торған бай ҡыҙҙары ла атайҙарынан көмөш тәңкәләр һорап алғандар. Ҡайтып уларҙан төрлө биҙәүестәр эшләгәндәр.

Шунан бирле ҡыҙҙар алмиҙеү, һаҡал, түшелдерек, хәситә, яға эшләү оҫталығын үҙ балаларына, ейәнсәрҙәренә өйрәткәндәр.

Халҡыбыҙҙың бай мираҫы булып был биҙәүестәр әле лә йәшәй һәм яңынан тергеҙелә. Өләсәйем килешле итеп үҙемә лә эшләп бирҙе. Эйәһенә ҡот килтерә, сит-ят күҙҙәрҙән һаҡлай, ти.

Миңлеәхмәтова Самира,

Өфө калаһы кала округы «Фатима Мостафина исемендәге 20 - се Өфө кала башкорт гимназияһы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы укыусыһы

Етәксеһе: Кәлиева Айгөл Абдулнафик

Ай һәм кояш

Борон-борон заманда күк йыһанында бар ғәләмде кыуандырып, ике кыҙ донъяға килгән, ти. Ай менән Кояш тип исемләгәндәр уларҙы. Ай үҫәһен көн үҫеп, бер - береһе менән кыуышып, береһенән - береһе сибәр кыҙҙар булып буй еткергәндәр, ти, улар. Кояш сыңғырлатып көлөп ебәрһә, бар донъя йәмләнә икән. Ай серле йылмайып бакһа, бар тирә - як әкиәт донъяһындай яктыра икән. Ике әхирәт бер - береһенә серҙәрен һөйләгәндәр, йыһан буйлап бергә гиҙгәндәр. Араларына ел дә үтмәҫтәй тойолған. Тик был дуҫлыкка көнләшеүселәр ҙә табылған. Бер мәл Йондоҙ-кыҙ Айҙың колағына: «Һин матур ҙа ул, һүҙ ҙә юк! Һылыуһың, серлеһең! Тик кояш янында һин тонокланаһың шул...», - тигән. Был һүҙҙәр Айҙың йөрәгенә ағыулы уктай казалған. Өндәшмәҫ, моңһоуға әйләнгән ул. Кояштың нурҙарына кыҙыға башлаған. Оҙак уйланғандан һуң

талғанда, Ай уның нурҙарын урлаған. Ҡояш йоҡонан торғас, дуҫының был ҡылығына эй көйөнгән, ти. Уның асыуынан бар - тирә яҡ көйгән, ти. Ай ҙа шул саҡ үҙенең хатаһын аңлаған. Башын түбән эйеп, Ҡояш янына ғәфү үтенергә килгән. Изге күңелле ҡояш дуҫын ғәфү итә. Һөйөклө дуҫына үҙе йоҡлаған мәлдә, нурҙарын да биреп тора икән. Ай рәхәтләнеп әхирәтенең нурҙары менән уйнай, ти.

Дуҫлыҡты бары изгелек менән һаҡлап ҡалып була шул!

Искужин Рушан,

Өфө калаhы кала округы «Мөхәмәт Искужин исемендәге 136 - сы башкорт лицейы» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеhы уkыусыhы

Етәксеhе: Ғирфанова Рәлиә Рәшит кызы

Тыңлауhыз бесәй

Бер Мыраухан тигән исемле, бик үз hүзле бесәй йәшәгән, ти. Тыңлауhыз за булған ул. Тыңлауhызлығы, үз hүзлелеге арkаhында, әсәhенән hәм башkа бесәйзәрзән дә бик йыш эләгеп тә торған үзенә. Әммә, hаман тиcкәреләнеп, үзенекен эшләгән икән. Урамда, күрше-тирә бесәйбикәләрзең балаларын эйәртеп йыш kына эш бозғандар. Шунан, Мыраухан башkа бесәйзәрзе ғәйепле итә икән, ти.

Тыңлауhыз Мыраухан, иптәштренә үзен күрhәтеп, бәйзә торған эттәрзе үсекләп, ишек алдында ем сүпләп йөрөгән kош-kорттарға көн күрhәтмәй баcтыра икән. Хужабикәнең hөт-kаймағын да урлаштыра икән, ти ул.

- Беззең балаларзы насарға өйрәтә hинең Мырауханың, - тип, башkа бесәйбикәләр мыжығас, әсәhе Мырауханды әрләп, бөгөн көнөндө ошонда үткәрәhең, тип киcәтеп, hарай kыйығына бикләп

ҡалдырған, ти.

Бесәй ҡыйыҡтағы тишектән оҙаҡ ҡына тыштағы хәлдәрҙе күҙәтеп ҡарап ултырған. Күҙенә ҡыйыҡҡа яҡын ғына беркетелгән һайғау башындағы сыйырсыҡ ояһын күренеп ҡала. Кескәй генә ҡошсоҡ, ояһы алдындағы таҡтаға ҡунып, эй, һайрай ҙа һайрай икән. Мыраухандың асыуы килгән: ул бында бикле ултыра, ә был сыйырсыҡҡай уны үсекләгәндәй, ҡыуанып йырлай. Ус алырға уйлап, ул сығыу урынды эҙләй башлаған.

Ниһәйәт, үҙ һүҙлеләнеп, Мыраухан бер тишек табып тышҡа сыҡҡан. Иплэп кенә сыйырсыҡ ояһына үрмәләй башлаған. Менеп етеп, инде ҡошсоҡто тотам ғына тигәндә, ҡыйыш баҫып аҫҡа ҡолап төшкән, ти.

Ул илап ерҙә аунап ятҡан. Иптәштәре быны күрһә лә, уның янына бармағандар. Мыраухан үҙе ғәйепле икәнен, улар ҙа аңлағандар.

Фатихова Даниела,

***Өфө калаһы кала округы
216 - сы балалар баҡсаһы
муниципаль автономиялы
мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы
тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Сөнәғәтова Илүзә
Миҙхәт ҡыҙы***

Ғәҙел ҡырмыҫҡа

Урмандың бер матур ерендә, ҙур өйөмөндә йәшәгән, ти, бер ғәҙел ҡырмыҫҡа. Ул һәр ваҡыт эшсән, ярҙамсыл булған. Юлында ниндәй генә бөжәктәр, ҡырмыҫҡалар осрамаһын ул гел генә ярҙам итеп китер булған. Унын күрше өйөмөндә йәшәгән, ти, дуҫы. Ул ялҡауыраҡ булған. Һәр ваҡыт дуҫының ярҙам иткәнен көтөп кенә торған. Дуҫы икенселәргә ярҙам итһә, ҡарап ҡына торған.

Бер ваҡыт айыу килеп сығып, ике ҡырмыҫҡа өйөмөн туҙҙырып киткән. Ғәҙел ҡырмыҫҡа шунда уҡ эшкә тотонған. Уға бөтә бөжәктәр, икенсе ҡырмыҫҡалар килеп ярҙам иткәндәр. Шунда уҡ

матур итеп кире өйөп тә ҡуйғандар. Ә күрше ялҡау ҡырмыҫҡа дуҫына ярҙамға ла килмәгән. Шуның өсөн уға ла бер кем ярҙам итмәгән.



Сафина Әҙилә,

Өфө ҡалаһы ҡала округы
97 - се балалар баҡсаһы
муниципаль автономиялы
мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы
тәрбиәләнеүсеһе

Етәксеһе: Сафина Зилиә Рәзиф ҡыҙы

Затлы бүләк

Бер ваҡыт ҡояш йылдың дүрт миҙгелен - көҙҙө, ҡышты, яҙҙы һәм йәйҙе үҙенә сакырып алған.

- Һеҙ, ҡайһығыҙ матурыраҡ, ҡайһығыҙ эшкә батырыраҡ, шуға бүләк бирәм, - тигән.

Ә бүләк, бик затлы икән - ус тултырып йондоҙ бирергә уйлаған ҡояш.

Һүҙҙе көҙ башлаған:

- Һеҙ бөтәгеҙ ҙә бик яҡшы беләһегеҙ, мин бөтә баҫыуҙарҙың уңышын йыям, бар донъяны алтынға күмәм. Ҡоштарҙы йылы яҡка оҙатам. Бүләк минеке булырға тейеш.

- Мин дә әҙ эшләмәйем, - тип һикереп торған яҙ. Мин ҡарҙы эретәм, баҫыуҙарға иген сәсәм, ҡоштарҙы йылы яҡтан саҡырып ҡайтарам, ағастарҙы япраҡ ярҙырам, болондарҙы сәскәгә күмәм.

арағыҙҙа иң матуры, уңғаны мин!- тигән ул.
- Ай-яй-яй, - тигән йәй, - мине тыңлағыҙ әле. Мин бар донъяны йәшеллеккә күмәм, сәскәләр үҫтерәм, игендәрҙе өлгөртәм, емеш-еләктәрҙе бешертәм. Мин дә матур.
- Ә минең эшем бик күп түгел, - ти тыйнаҡ ҡына ҡыш. Мин ерҙе ял иттерәм, киләһе уңыш өсөн ҡарҙар ташыйым, донъяны ап - аҡҡа күмәм, балаларҙы сана - саңғы шыуырға саҡырам. Мин дә йәмһеҙ түгел. Мин дә матур. Бөтә донъя ап - аҡ бәҫкә күмелә.
Ҡояш тыңлап торған да, бүләкте береһенә лә бирә алмаған.
- Ана, барығыҙға ла булһын, - тигән дә йондоҙҙарҙы күккә һипкән.
Йондоҙҙарҙы береһе лә ала алмаған. Сөнки, миҙгелдәрҙең барыһы ла матур булғандар. Ә йондоҙҙар йәйен, көҙөн, ҡышын, яҙын да балҡып торалар.

Латыпов Булат,

Өфө ҡалаһы кала округы
18 - се мәктәп
муниципаль бюджет дөйөм белем
биреү учреждениеһы
уҡыусыһы
Етәксеһе: Юлдашбаева Алина
Хәбир ҡыҙы

Ҡурҡаҡ ҡуян

Борон - борон заманда бөтә урман йәнлектәре бик татыу йәшәгән, ти. Бер - береһенә ҡунаҡҡа йөрөгәндәр, ярҙам иткәндәр. Ә айыу урманға батша булып бойорорға, башҡаларға эш ҡушырға яратҡан. Йәнлектәргә айыуҙың шулай баш булып йөрөүе оҡшап етмәгән. Уларҙың да баш булғыһы килгән. Кем уҙарҙан бер-береһенә бойорорға тотонғандар. Бер көндө улар талашып та киткәндәр, ти.

Бәләкәй генә ҡуяндың күңеле ныҡ кителгән был хәлгә. Урман хайуандарын яңынан дуҫлаштырыр өсөн барыһын да үҙенә ҡунаҡҡа саҡырырға булған. Бик матур итеп өҫтәл әҙерләгән, ти, ҡуян. Ҡунаҡтары килеп, өҫтәл артына ултырғас, бешергән ашын алырға сыҡҡан, ти, ул. Бик ҡыуанып, дәртләнеп, ашығып инеп килгәндә, яңылыш тәгәрәп киткән һәм бөһөрәп торған аш түгелеп

ҡуян аяғын бешергән, ти. Эҫегә түҙә алмай һикерә башлаған. Ҡунаҡтары ярҙам итергә килеп сыҡҡан, тик ҡуян нык ғәрләнгән һәм уларҙан сығып ҡасҡан, ти.

Шулай итеп, урман хайуандары дуҫлаша алмай таралышҡандар. Һәр береһе үҙ юлдары менән киткән. Ҡуян да үҙенең ҡайҙа йүгергәнен белмәй, сапҡан да сапҡан. Һикереп йөрөү уға бик оҡшаған, шунан алып гел һикерә башлаған. Уны ҡасып йөрөгәне өсөн «ҡурҡаҡ ҡуян» тип атап йөрөтә башлағандар.



Хәкимова Паулина,

Өфө ҡалаһы ҡала округы
234 - се балалар баҡсаһы
муниципаль бюджет мәктәпкәсә
белем биреү учреждениеһы
тәрбиәләнеүсеһе

Етәкселәре: Сәйетғәлина Гөлназ
Фәнис ҡыҙы,
Макаева Айгөл Рифҡәт ҡыҙы

Яҙҙы уятыу

Йәшәгән, ти, бер Турғай. Бер көндө ул бик иртә уянған, ә тышта шул тиклем һалҡын ел иҫә икән. Бик күңелһеҙ һәм һыуыҡ булып киткән Турғайға.

Турғай: -Яҙ ҡайҙа икән? Ул беҙҙе онотҡандыр, уны эҙләп табырға кәрәк.

Турғай Яҙҙы эҙләп, юлға сыҡҡан.

Турғай: Мин-Турғай. Мин бик ҡыйыу, йылғыр һәм уңған.
Ер сигенә барырмын
Яҙҙы эҙләп табырмын!

Оса икән Турғай, оса икән. Оса торғас бер ҡайын ағасының ботағында өшөп ултырған Күгәрсенде күреп ҡала.

Турғай: - Һин кем? Ниңә шулай ныҡ ҡалтыранаһың?

Күгәрсен:- Мин Күгәрсен. Мин шул тиклем өшөнөм.

Турғай:- Мин - Турғай. Мин бик ҡыйыу, йылғыр һәм уңған.

Ер сигенә барырмын
Яҙҙы эҙләп табырмын!

Күгәрсен: - Мөмкинме, мин дә һинең менән барам? Минең дә Яҙҙы табаһым килә!
Мин ҡыйыу, зирәк, уңған Күгәрсен. Дуҫтарыма ярҙам итәм.

Улар бергәләп осоп киткәндәр. Оса торғас ыршы төбөндә ҡысҡырып илап ултырған ҡуян балаһын күреп ҡалғандар.

Ҡуян: -Эй! Эй! Ҡотҡарығыҙ, ҡотҡарығыҙ!
Күгәрсен: - Һин ниңә илайһың, Ҡуянҡай?
Ҡуян: - Мин нығ итеп асыҡтым. Һыуыҡта ашарға таба алмайым.
Күгәрсен:- Хәҙер мин һине ҡотҡарырмын. Миндә икмәк һынығы бар.
Турғай: - Беҙҙең менән бараһыңмы?
Күгәрсен: - Ә һин нимә эшләй беләһең?
Ҡуян: - Һикерә беләм.
Күгәрсен:- Әйҙә улайһа.

Баралар, баралар, ти, ә буран һаман да тынмай икән. Бара торғас уларға аҡыллы Өкө осраған, ти.

Өкө: - Күрәһең был буран тынырға уйламайҙыр.
Ҡуян: - Ғәфү итегеҙ, ә ниндәй юл, Яҙға алып бара икән?
Өкө: - Ә-ә-ә, һеҙ Яҙҙы эҙләйһегеҙме? Афариндар!
Күгәрсен: - Ә Яҙҙың ҡайҙа икәнен беҙ белмәйбеҙ.
Өкө: - Ошо тау башына менегеҙ, Яҙҙы табырға күп ҡалмаҫ.
Бергәләп: - Әйҙәгеҙ, тиҙерәк!
Өкө: - Хәйерле юл!
Ҡуян:-Беҙ был тауға нисек менербеҙ икән?

Ҡуян: - Беҙ был тауға нисек менербеҙ икән?
Турғай: - Мин беләм!- тигән дә, беренсе булып тау башына осоп менеп ултырған, ти.
Уның артынан башҡалар ҙа осоп менгәндәр, ә Ҡуян һикереп менгән, ти.
Турғай: - Елкәй, Елкәй! Белмәйһеңме Яҙ ҡайҙа икәнлеген, белмәйһеңме?
Ел: - Беләм! Уны ҙур болот ҡаплаған. Миңә ултырығыҙ. Мин хәҙер һеҙҙе алып барам! Ана Яҙ!
Күгәрсен: - Яҙ, Яҙ! Уян!
Бергәләп: - Беҙгә ҡайт! Уян, Яҙ!

Күгәрсен: - Яҙ, Яҙ! Уян!
Бергәләп: - Безгә ҡайт! Уян, Яҙ!
Бергәләп:- Безгә ҡайт! Уян, Яҙ!
Яҙ:- Мине Ҡыш ныҡ йәшергән, шуға оҙаҡ йоҡлағанмын.
Турғай:- Етәр һиңә йоҡларға!
Ҡуян: - Әйҙә, тиҙерәк сыҡ!
Ҡуян: - Әйҙә, тиҙерәк сыҡ!
Бергәләп: - Ерҙе уят! Ҡарҙы ирет!
Яҙ:- Мин һуңланым бит!
Күгәрсен: - Ә без бергәләп йыр йырлайыҡ, ер йылап уяныр һәм ҡар ирер.
Әйҙәгеҙ бергәләп!
Бергәләп йырлайҙар: - Беҙ өсәү, өсәү генә. Яҙ, уян, уян ғына.
Ҡуян: - Берәү ҙә беҙҙең кеүек оса ла, һикерә лә алмай!
Бергәләп:- Беҙ барлығы өсәү, ә йөҙгә торош итәбеҙ.
Йырлайҙар: - Беҙ ни бары өс, дуҫлыҡта көс, беҙҙең янға күс!
Күгәрсен: - Бына беҙ Яҙҙы таптыҡ! Ышанмаһағыҙ, ҡарағыҙ!
Шулай итеп, дуҫтар Яҙҙы йоҡонан уятҡандар, ти.

Ҡошсоҡ баш осонан өйрөлөп осоп, һайрай - һайрай, үҙенең артынан әйҙәй. Бабайға атын етәкләп, сыйырсыҡ артынан эйәреүҙән башҡа сара ҡалмай. Сөнки быңдай яҙғы буранда имен ҡайтып етеүенә бөтөнләй ышанысы ҡалмай. Ҡошсоҡ талпынып алға ынтыла, ә бабай унан ҡалмаҫҡа тырыша. Бына мөғжизә! Ауылдың таныш йорттары, ана үҙенең ҡапҡаһы! Бына бит, ҡошсок ярҙам итеп ҡайтып етте! Бабай ҡыуанысынан сыйырсыҡ - ҡотҡарыусыһына рәхмәт һүҙҙәрен әйткән. Ә инде бер нисә көн үткәс, ҡошсоҡҡа матурҙан оя эшләп ҡуйған, ти. Ошо ваҡиғанан һуң кешеләр һәр йыл һайын сыйырсыҡтар йылы яҡтан ҡайтыуға оялар эшләп ҡуялар икән. Ә инде апрель аҙағында ҡапыл сыҡҡан буранды, башҡорт халҡы сыйырсыҡ бураны тип йөрөтәләр икән.

Ҡасҡынбаев Кәмил,

***Өфө ҡалаһы кала округы
97 - се балалар баҡсаһы
муниципаль автономиялы
мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы
Тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Шарапова Регина
Рәжәп ҡыҙы***

Ҡуян менән терпе

Борон - борон заманда йәшәгән, ти, терпе менән ҡуян. Улар иң яҡын дуҫтар булғандар. Шатлыҡты ла, ҡайғыны ла бергә уртаҡлашҡандар, бер - береһенә терәк - таяныс булғандар. Бөтөн эштәрен бергә эшләгәндәр ти. Яҙғыһын ер һөргәндәр, йәшелсә, емеш ултыртҡандар, йәйгеһен һыу ҡойғандар, утын әҙерләгәндәр, көҙгөһөн мул уңыш йыйыр булғандар, уртаҡ бүлешкәндәр ти.

Бер йылды ямғырҙар бик әҙ яуған, ергә ҡоролоҡ килгән. Быға тиклемге һымаҡ мул уңыш йыйып булмаған. Ҡыш килгәс, яҙға тиклем аҙыҡ етмәгәнен аңлап, әҙерәк ашар өсөн, һыуыҡ мәлдә йоҡлап үткәрергә булғандар. Ҡыш башланыу менән ҡуян һәм терпе йоҡларға ятҡандар, ти. Терпе асыҡһа ла, һүҙенә тоғро ҡалып оҙаҡ йоҡлаған, ашарға булғанда гел дә ҡуянды көтөп бергә булған. Ҡуян иһә йоҡлаған булып иплэп кенә емеш - еләктәрҙе ашай, ти. Терпе йоҡонан уянһа уның менән ҡабаттан тамағын туйҙыра. Шулай яҙға тиклем аҙыҡ бөткәс, ҡуян оялышынан тунын

Вилданова Карина,

***Өфө ҡалаһы кала округы
97 - се балалар баҡсаһы
муниципаль автономиялы
мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы
Тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Колсонбаева Илүзә
Нуриман ҡыҙы***

Сыйырсыҡ бураны

Борон - борон заманда, йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Мал - тыуар, ҡош - ҡорт аҫрап, ауыл ерендә бик матур донъя көткәндәр. Һыуыҡ, буранлы ҡыш үтеп, ҡарҙар иреп, йылғаларҙа һыу ташып, ергә матур яҙ килә. Тышта шундай ҡояшлы, йылы көн! Бабай әбейенә: «Әбей, бындай матур көндө бушҡа үткәрмәйем әле, урманға утынға барып киләйем әле», - тигән дә, йыйынып, атын егеп, юлға сыҡҡан.

Урманда яҙ, күңелле! Бына, тирләп - бешеп, бер арба утынды тейәп тә ала. Ни ғәләмәт! Ҡапыл көн боҙолоп, көслө ел сыға. Күк йөҙөн ҡара болоттар ҡаплап ала, ябалаҡлап ҡар яуа башлай, һыуытып ебәрә. Бабай атын етәкләп, ҡайтыр яҡҡа атлай, әммә килгән юлын тапмай, аҙаша. Нимә эшләргә? Тирә - яҡта урман, күҙ асҡыһыҙ буран, бер ни күренмәй! Шул саҡ ниндәйҙер ҡошсоҡтоң «сырҡ-сырҡ» - һайрауын ишетеп, туҡтап ҡала. Был

алыштырып терпе уянмаç борон сығып ҡасҡан, ти.

Шунан алып терпе менән ҡуяндың дуçлығы бөткән. Ҡыш етер булһа терпе үҙенең өйөндә яҙға тиклем йоҡоға тала, ә ҡуян иһә ялҡаулашып ҡышҡа емеш - еләк йыймай урманда аҙыҡ әҙләп йөрөр булған, ти.

Балалар, дуç булыуҙын иң мөһим һыҙаты: дуçыңа биргән һүҙеңә тоғро булыуҙа, ауыр саҡтарҙа бер - береңә ҡарата ярҙамсыл булыуҙа.

Юғиһә, терпе менән ҡуян һымаҡ булырһығыҙ.

Фәттәхова Ралина,

***Өфө ҡалаһы ҡала округы
216 - сы балалар баҡсаһы
муниципаль автономиялы
мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы
Тәрбиәләнеүсеһе***

Етәксеһе: Фәтәхова Рита Мөнир ҡыҙы

Бүре һәм торна

Йәшәгән, ти, бер матур урманда бүре. Ул гел ас булған. Ә был урманға яҙ һайын торналар осоп ҡайтыр булғандар. Бүре һәр ваҡыт торналарҙы ҡарауыллап йөрөгән. Торналар бик күп булғандар, шуның өсөн бүре улар янына бара алмаған. Берәйһе яңғыҙыраҡ йөрөһә, бүре баҫтырыр булған. Торналар бик нык ҡурҡҡандар.

Бер ваҡыт бүре нык асыҡҡан. Бер бәләкәсерәк ҡошто тотоп ашарға булған. Уны баҫтырып тотоп ашаған ваҡытта, тамағына һөйәк торған. Ул нимә эшләргә белмәй, торналар йөрөгән ергә йүгереп барып сыҡҡан. Йығылып та киткән. Торналарҙың башлығы бүре янына барған. Бүре һөйләшә лә алмай, ауыҙына төртөп күрһәткән. Бүренең тамағында һөйәк торғанын торна аңлап ҡалған. Шулай ҙа ҡотҡарырға булған. Оҙон суҡышы менән һөйәкте тартып алған. Бүре рәхмәттәрен әйтеп, урманға йүгергән.

Шул ваҡыттан алып ул торналарҙы баҫтырмаған.